*Минниса* **БАҺУМАНОВА**

# *Даръя кискән шағир*

*Даръя һыуҡайҙарын ута алмай,*
*Бүленеп тора әрме көстәре.*
*(Халыҡ йырынан)*


*Ирек Кинйәбулатов*

Илленсе йылдарҙа уҡ әҙәбиәткә килгән Ирек Кинйәбулатов тигән шағирҙың әҫәрҙәрен “Ағиҙел” журналынан уҡып белә инек.

Башҡорт дәүләт университетына уҡырға инеү өсөн һынау тотабыҙ, шунда бер уңайһыҙ хәл тыуҙы. Көндәр эҫе тора. Гел баш баҫып уҡып ултырырға яратмаған йәш абитуриенттарҙың береһе беренсе һанлы ятаҡтың нисәнселер ҡаты тәҙрәһенән аҫта үтеп барыусыларға һыу һипкән. Ҡыҙҙар йәш егеттәр менән шулай шаяралар ине. Мин тауыш ҡупҡанға үҙемдең бүлмә тәҙрәһенән аҫҡа ҡараным. Ни күрәм: аҫта ап-аҡ костюм кейгән берәү үтеп бара. “Ирек Кинйәбулатовҡа яңылыш һыу һипкәндәр”, — тинеләр ҡыҙҙар. Мин бүлмә буйлап туҙынып йөрөйөм: “Шаярыуҙың да сиге бар. Әҙерәк өлкән кеше менән йәш бала-сағаны айырып була бит инде. Кем икән ул һуҡыр?!” Бүлмәләш ҡыҙҙар ҙа минең ризаһыҙлыҡты ҡеүәтләне.

Шиғыр кисәләрендә мин уны сәхнәлә күрә, көр тауыш менән етди шиғырҙар уҡығанын ишетә йөрөнөм. Дүртенсе курста Башҡорт дәүләт университетынан бер төркөм студенттар араһында мине лә Раевка интернат-мәктәбенә практикаға ебәрҙеләр. Икенсе тапҡыр Ирек ағайҙың исеме яҡындан шунда тағы ла яңғыраны. Беҙҙе ҡаршы алған башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы: “Һеҙҙең арағыҙҙа яҙыусы йә шағир юҡмы? — тип һораны ла, яуабыбыҙҙы ла көтөп тормай: — Бында Ирек Кинйәбулатов практика үткәйне. Өлкән класс ҡыҙҙарының барыһы ла тигәндәй уға ғашиҡ булды. Бына китте ығы-зығы. Ҡыҙҙарҙы интернатта бикләп тоторға тура килде. Бик ҙур ауырлыҡ менән имен-аман практиканы тамамланыҡ. Шундай хәл тыумаһын, тип алдан хәстәрләүем”, — тине.

Ысынлап та, Ирек ағай ғашиҡ булырлыҡ шәхес. Төҫкә күркәм, шаян, хәрбиҙәрсә тура баҫып йөрөй, телһеҙ кешене лә әңгәмәләштерерлек тартым көсө бар. Бик мәрәкәсел, иркенләп кинәйәле һөйләшә.

Үткән йыл “Ҡайтайым ауылыма” тигән телетапшырыуҙа Ирек ағай үҙе тураһында тәү башлап бер ҡыҙыҡ ваҡиға һөйләгәйне. Өфөнән Ҡырмыҫҡалы районы Абдулла ауылындағы апаларына бер малай каникулға ҡайта һәм интернаттағы тормош менән ҡыҙыҡһыныусы малайҙарға майлап печенье ашатыуҙары хаҡында һөйләй. Утыҙ һигеҙҙә тыуып, һуғыш осоро һурпаһын




*“Йәш әҙәбиәтсе” стена гәзите*

татыған яугир малайҙарына был ғәжәйеп әкиәт тормошо һымаҡ күренә. Ирек ағай иптәш малайы менән йәйәүләп Өфөгә сыға ла китә. Әммә малайҙарҙы милиция кире ауылдарына алып ҡайтып ҡуя. “Оло юлдан күҙҙе алмай, Көн артынан айҙар үтте” тип яҙҙы шағир үҙенең “Ауылымдың оло юлы” шиғырында. Алға әйҙәп, гелән күңелде атлыҡтырып торған ошо юл алып сыға ла инде уны оло донъяға. Булыр баланың егетлек ҡылығы был.

Тыуған ауылында башланғыс белем алып, артабан Иҫке Бәпес урта мәктәбен тамамлағас, Ирек ағай Ҡара диңгеҙ флотында дүрт йыл хеҙмәт итә.

Беҙ Башҡорт дәүләт университетында уҡып йөрөгән йылдарҙа ул күптән тарих-филология факультетын тамамлап, Лида Заһит ҡыҙына өйләнгәйне. Башҡортостан радиоһында эшләп алған, артабан “Совет Башҡортостаны” гәзитенең Урал аръяғы райондарын хеҙмәтләндереүсе махсус хәбәрсеһе булып киткән. Унда 12 йыл эшләп ташлаған. Балалары Сибай ҡалаһында тыуған. Беҙ тормош иптәшем Аҫылғужа менән Баймаҡҡа һирәк ҡайтһаҡ та, Ирек ағайҙы ишетә-күрә йөрөнөк.

Ирек ағай бөтә матбуғат баҫмаларында эшләп алды: “Башҡортостан” гәзите редакцияһында әҙәби хеҙмәткәр, әҙәбиәт һәм сәнғәт бүлеге мөдире, “Һәнәк”, “Ағиҙел” журналдарында, Башҡортостан китап нәшриәтендә мөхәррир булды. Башҡортостан яҙыусылар союзында нәфис әҙәбиәтте пропагандалау бюроһы директоры, аппараттың баш белгесе вазифаларын башҡарҙы.

Етенсе класта уҡып йөрөгән Ҡинйәбулатовтың тәүге шиғырҙары “Пионер” (1953) журналында донъя күрә. Башҡорт дәүләт университетының “Шоңҡар” әҙәби-ижад түңәрәгендә ҡанат нығытҡан егеттең “Баҫыу юлы” (1970) исемле йыйынтығы уны шағир итеп таныта.

“Булырҙай кешеләр Баймаҡта тыуып үҫә, эшләй йә ваҡытлыса булһа ла йәшәп китә”, — тип маҡтанырға һәм әллә күпме мәшһүр артистарҙың йә яҙыусыларҙың, дәүләт кешеләренең исем-шәрифтәрен һанарға ятраҡан ирем, яҙыусы Аҫылғужа Баһуманов, Ирек ағайҙың ижадын үҙ итте һәм тәүге йыйынтығы тураһында мәҡәлә баҫтырҙы. Ҡыйыу йөрәкле матростың диңгеҙ кисеп, зәңгәр юллы стихиянан арынып, тыуған яғын һағынып, баҫыу юлынан хисләнеп ауылына ҡайтыуы, шул тойғолары күңеленән шиғыр булып урғып сығыуы ғәжәп түгел. “Матрос ҡулдары”, “Приказ”, “Диңгеҙ”, “Зәңгәр юлдар” кеүек тәүге шиғырҙарына көслө лиризм, юғары граждандлыҡ тойғолары хас.

Ирек ағайҙың шиғырҙары һәм “Сыйырсыҡтар бала осора” лирик поэмаһы индерелгән йыйынтығы 1973 йылда нәшер ителде. Ул “Бурысым бар” шиғыры менән асыла. Ҡешене тәбиғәт балаһы тип һанай автор, шуға ла үҙен иң тәүҙә тәбиғәткә, иҫкән елгә, үҫкән үләнгә бурыслы тоя. Тыуған ергә бурыстың иң олоһон, изгеһен, кешеләргә мәңге бөтмәҫен йөкмәп баҫҡан ергә шағир-гражданин. “Әсәй аманаты”, “Атай ҡулы”, “Ялбыр ҡайын” шиғырҙарында һәм “Сыйырсыҡтар бала осора” поэмаһында ҡанатһыҙ ҙа ҡанатлана белеүсе, ата-әсәһенә рәхмәтле һуғыш йылдары балаларына хас үҙ яҙмышын тасуирлай. Бер йыйынтығының “Һөйөү иртәһе” тип аталыуында бер хикмәт бар: “Донъя матур. Хатта ун йәшәп тә, Һаман килер һаман йәшәгең”, — тип аса эске тойғоларын һәм “Йылдар имен килһә — донъя имен, Ҡыуанычлы булыр йылдары!” тигән һығымта яһай. Совет заманы кешеһенә хас уй-кисерештәр ҙә ят түгел уға. “Ленин өмәһе”, “Туғанлыҡ”, “Башҡортостан комсомолы”, “Сиҙәмселәр” быға асыҡ миҫал, уның был әҫәрҙәре шул замандың һулышын мәңгеләштерә.

Ғәжәп хәл, Ҡара диңгеҙ флотында дүрт йыл хеҙмәт итеп тә, Ирек ағай ул йылдарын артыҡ иҫкә алмай, ә бына башҡаларҙы күрә белә. Антарктиданан башҡорт халҡын Яңы йыл менән ҡотлаған “Башкирия” теплоходы экипажына “Ҡотлау” шиғырын арнаған. Шул теплоходта класташым, Көйөргәҙе районының Түкән ауылы егете Мөнир Абдуллин хеҙмәт иткәнгә күрә был шиғыр минең күңелемә бик яҡын, шул ҡотлау шәхсән миңә килгәндәй булды.

Бәй, автор “Йәшлегемдең һүнмәҫ эҙе” тип һаман да яныуын, ил өҫтөнә килгән бәлә уның йөрәк яраһына әйләнерен кем белгән?! “Арғымаҡта” китабын ҡулыма алғас ҡына быға төшөндөм:

Рәсәй менән Украина
Таба алмай уртаҡ тел дә.
Улар хәҙер туған түгел,
Улар хәҙер — сит-ят илдәр...
Теләй улар бүлешергә
Моряктарҙы — ҡап урталай,
Караптарҙы — ҡап урталай,
Бар флотты — ҡап урталай...
Таралырмы берәй заман
Өҫтөндәге ҡара болот?
Тағы ниҙәр күрер икән
Төп хужаһыҙ ҡалған флот? —

тип әсенеп ҡайғыра-һыҙлана штурвалда дүрт йыл торған элекке диңгеҙсе Ирек Ҡинйәбулатов. Бүлендек тә, бер-беребеҙгә йөҙроҡ күрһәтә башланыҡ. Диңгеҙ менән ҡоро ер, йәшәйеш яҙмышы уны уртаға бүлеп һыҙландыра. Шағирҙың алдан тойолған хәсрәте әйтелеп бөтмәһә лә, ғәмәлдә бөгөн алдыбыҙға килде

бит. Шөкөр, “даръя һыуҙарын бүлеп, әрме көстәре” әлегә тын тора, әммә Рәсәй менән Украина мөнәсәбәттәре ҡытыршыланған һайын, шағирҙың беҙгә төбәп әйткән һорауы тынғы бирмәй: “Тағы ниҙәр күрербеҙ икән?!”

“Арғымаҡта” йыйынтығында авторҙың аллегорик шиғриәт арғымағын оҫта йүгәнләүе күренә. Йыйынтыҡҡа тематик киңлек, жанрҙар төрлөлөгө, боронғо тарих, бөгөнгө тормош, йәмғиәттең киләсәге өсөн борсолоу хас.

Сәпкә тейгән маһирлығы бигерәк тә уның арнау-бағышлауҙарында күренә. Уның кеүек шиғри тел менән шәхестәребеҙҙең тәбиғи характерын асҡан, мәҙәни, әҙәби һәм тарихи донъябыҙҙа тотҡан урынын билдәләгән башҡа башҡорт шағирын мин белмәйем. Заһир Исмәғилевкә арналған “Урал ҡурайы”, Рәми Ғарипов тураһындағы исемһеҙ шиғыры, Фәрит Иҫәнғоловҡа бағышланған “Өлгөрмәнек рәхмәт әйтергә” шиғырын миҫал итеп килтерәм. “Һинең ялҡын”, “Һыуҙан алып утҡа һалғандан” әҫәрҙәрен Шәйехзада Бабичҡа арнай. Арнауҙар һәр йыйынтығында бихисап. 2005 йылда тормош иптәшем Аҫылғужаның вафатына арнап яҙған “Аҫыл егет инең...” шиғырын уҡып тетрәндергәйне. Ирек ағай бик күп шәхестәребеҙҙе йә маҡтап, йә һағынып-юҡһынып хәтер һәм юбилей кисәләрендә сығыш яһай йә китабында тасуирлай. Ирек Лотфулла улының ижади маһирлығы М.Өмөтбаев, М.Ғафури, З.Биишева, Ф.Ҡәрим, Р.Ғарипов, С.Чекмарев исемдәрендәге әҙәби премиялар менән баһаланды.

Тыуған илгә булған оло һөйөү хисе менән тулы байтаҡ шиғырҙары ла бар был йыйынтыҡта: “Дуҫлыҡ төйәге”, “Сибай”, “Тыуған төйәк”, “Баймаҡ яғы”, “Хәйбулла”, “Күңел талмаҫ Талҡаҫта”, “Әбйәлил” һ.б. “Ат аунаған ерҙә төк ҡала” тигән кеүек, Ирек ағай аяҡ баҫҡан ер, ул белгән-күргән кешеләр, ишетеп-уҡып белгән ваҡиғалар әҫәрҙәрендә тасуирланып ҡала. “Ауылымдың оло юлы”, “Атай йыры”, “Әсәй аманаты” шиғырҙары авторҙың автобиографияһын да асып бирә.

Үҙгәртеп ҡороу заманында Ирек ағай ҡыйыу рәүештә “Мин — башҡорт!” (1993) тигән шиғри йыйынтыҡ нәшер итте. Бөтә нәмәгә “русский” сифатын ҡушып өйрәнгән оло ағайыбыҙға өйрәнеп бөткәйнек, ә бына “Мин — башҡорт!” тип китабының тышына сәпәп ҡуйыусы башҡорт шағирын ишеткән дә, күргән дә юҡ ине.

Бер ваҡыт урамда Ирек ағайҙың башҡорт милли бүркен кейгәнен абайлап ҡалдым да шатланып: “Һеҙҙең ике ҡойроҡ бар икән дә ул!” — тинем. Ул һәр ваҡыттағыса шаяртып: “Ҡойроҡто ҡырҡырға тырышһалар ҙа, ҡырҡа алғандары юҡ әле”, — тип яуапланы. Былар Ирек ағайҙың тәрән милли асылынан, ғәййәрлегенән килә.

Шағирҙы төрлө премиялар лауреаты исемдәрен ҡыуыуҙа йыш ғәйепләнеләр. Утыҙ йылдан ашыу әҙәбиәтебеҙгә, мәҙәниәтебеҙгә хеҙмәт итеп тә бер ниндәй маҡтаулы исеме булмаған тормош иптәшем Аҫылғужаны иҫемә төшөрҙөм дә кире уйлап ҡуйҙым: бынау иҡтисади ҡытлыҡ заманында, хөкүмәт яҙыусыларҙы дәртләндерә алмаған осорҙа, бәлки, йылғырыраҡ булып, үҙенде һәм ғаиләңде лә матди яҡтан тәьмин итеү сараһын күрергә кәрәктер ул, тип уйлап ҡуйҙым. Беҙҙә бит, үҙең тауыш бирмәһәң, һинең барлыҡты иҫкә алыусы юҡ.

Ирек Ҡинйәбулатовтың шиғырҙары бик ябай, аңлайышлы, тәбиғи тел менән яҙылған. “Ҡайсы булып керпектәрем ҡырҡа Ҡара төндөң ҡара япмаһын” йәки “Булды бит ҡайсаҡ аҡ айға ҡарап, Өргән эт кеүек, эттәй өрҙөләр” һымаҡ натурализм элементтарын да файҙаланып ҡуя. Әммә Ирек Ҡинйәбулатовтың һүҙ уйната белеүен, ябай ғына һөйләмдәргә лә оло мәғәнә һалыуын танымай булмай. Үҙе әйтмешләй, “шиғри һүҙ, образдар ярҙамында халыҡҡа ниндәйҙер фекерҙе еткереү, күңелдәрҙә иртәгәһе көнгә өмөт, ышаныс уятыу” шағир Ирек Ҡинйәбулатовтың йөрәге менән тойған бурысы. Кешене яҡшыға өмөтләндереүҙе ул кешене йәшәтеүсе төп шарт тип иҫәпләй һәм шуға хеҙмәт итә.